2021 й.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

1. Программаның мәғлүмәт картаһы
2. Аңлатма яҙыу
3. Программаның маҡсаттары һәм бурыстары
4. Программаның йөкмәткеһе
5. Программаны тормошҡа ашырыу шарттары
6. Программаға ҡушымта

1. Программаның мәғлүмәт картаһы

| | |
|---|---|
| Программаның тулы атамаһы | “Йәйләү” балаларға өҫтәмә белем биреү, рухи һәм физик сәләмәтлектәрен нығытыу йүнәлешендә эшләүсе профилле смена |
| Программаның авторҙары | Буракаева Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы<br>Буракаева Гөлнур Диҡҡәт ҡыҙы |
| Программаны ғәмәлгә ашырыусы | Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының тәрбиә һәм өҫтәмә белем биреү бүлеге |
| Программаны үткәреү урыны | Башҡортостан Республикаһының муниципаль райондары һәм ҡала округтары |
| Юридик адресы | Башҡортостан Республикаһының муниципаль райондары һәм ҡала округтары (тәғәйен үткәреләсәк урындар) |
| Программаның маҡсаты һәм бурыстары | Баланың тәбиғи һәләтен асыу маҡсатында туған тел мөхите булдырыу, һәр яҡлап үҫешенә йүнәлеш биреү өсөн шарттар тыуҙырыу, сәләмәтлеген нығытыу өсөн – балалар уйындары, спорт ярыштары үткәреү, сәйәхәттәргә алып сығыу, музыка ҡоралдарында уйнап өйрәнеү, туған телдә йырҙар башҡарыу, ырыу тарихы аша үҙ халҡының тарихын өйрәнеү, “Йәйләү” урынлашҡан төбәктәге топонимик атамаларға ҡарата ижад ителгән легендаларҙы өйрәнеү аша үҙ төбәге тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, халыҡ шәхестәренең, күренекле әңелдәренең тормош һәм ижад юлын өйрәнеү маҡсатында улар исеменә конкурстар үткәреү, ҡыҫҡа ваҡытҡа сәйәхәттәргә алып сығып, тирә-яҡтың үҫемлектәре, ҡош-ҡорто, йәнлек-хайуандары менән таныштырыу һәм туған телдә уларҙың атамаларын өйрәтеү, һәр баланы сәхнәгә сығарыу, мотлаҡ йырлатыу һәм бейетеү.<br>Бурыстар:<br>– баланың ҡанына һалынған һәләтен асыу;<br>– балала тыуған төбәккә, тәбиғәткә, илгә |

| | |
|---|---|
| | карата һөйөү уятыу, тәбиғәтте һаклау зарурлығын аңлатыу;<br>– музыка коралдарында уйнауҙың рухи сәләмәтлеккә лә, физик сәләмәтлеккә лә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу аша уйнарға өйрәтеү;<br>– бейей һәм йырлай белеүҙең сәхнә өсөн генә түгел, көндәлек тормошта сәләмәт йәшәү шарттарының нигеҙе икәнлеген, рухи сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу һәм бейергә өйрәтеү;<br>– саф һауала, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир яһарлык шарттарҙа баланың физик һәм рухи киммәттәрен үҫтереүгә, үҙ тәрбиә менән шөғөлләнергә йүнәлеш биреү;<br>– баланы үҙе өсөн генә түгел, коллектив ("Йәйләү"ҙә ырыу) өсөн дә, артабан мәктәп, укыған һәм эшләгән коллективы өсөн дә йәшәргә, борсолорға, уның мәнфәғәтен күҙәтергә өйрәтеү;<br>– буш вакытты дөрөҫ файҙаланырға, ялды ойоштора белергә, беренсел мөһим бурысты үтә мөһим булмағандарынан айырып өйрәтеү;<br>-бер генә минутты ла бушка үткәрмәй, файҙалы максаттарға йүнәлтеп өйрәнеү күнекмәһе булдырыу, баланы үҙ-ара мөғәмәлә итеү, бәхәсләшеү, тапкыр һәм дөрөҫ яуап биреү күнекмәһе тәрбиәләү;<br>– баланың күңел донъяһына ыңғай тәьҫир итеү; башкаларҙы аңлау өсөн, үҙендә уның урынына куйып карарға өйрәтеү. |
| Программаның төп эш йүнәлештәре | Программала аҙ вакыт эсендә бик күп бурысты тормошка ашырыу максаты билдәләнгән, шуның өсөн төрлө йүнәлештәр каралған:<br>– белем биреү;<br>– рухи-әхлаки тәрбиә;<br>-спорт-һауыктырыу;<br>– ижади эшмәкәрлек;<br>– илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү;<br>-мәҙәни-тарихи белем биреү һәм ғәмәли |

| | |
|---|---|
| | башҡарыу;<br>-социаль-көнкүреш һабаҡтары. |
| | -һәр ырыуҙың тарихы, мәҙәниәте аша башҡорт халҡының тарихын, мәҙәни тарихын,мәҙәниәтен, шәхестәрен, ижадын өйрәнеү;<br>-башҡорт балалар уйындарын өйрәнеү;<br>-кул эштәре оҫталығына өйрәнеү;<br>-йыр-бейеү, сәсәнлек, нәфис һүҙ оҫталығына өйрәнеү;<br>-топонимик легендалар һәм иҫтәлекле урындар менән танышыу һәм тасуирлай белеү;<br>-күренекле кешеләр менән осрашыу;<br>- һорау биреп, әңгәмә ҡороп өйрәнеү;<br>-ҡурай, ҡумыҙ уйнау серҙәренә төшөнөү. |
| Үтәлеү ваҡыты | Йыл әйләнәһенә даими |
| Программала ҡатнашыусыларҙың дөйөм һаны | Балалар һанын муниципаль органдар билдәләй |
| Программала ҡатнашыусыларҙың йәше | 7 йәштән 15 йәшкә тиклемге балалар |
| Ниндәй һөҙөмтәләргә өлгәшеү күҙ уңында тотола | Рухи сәләмәтлек тәрбиәләү өсөн үҙ халҡындың быуаттарҙан-быуаттарға һынала, камиллаша, күсә килгән рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү;<br>- республикабыҙға исем биргән башҡорт халҡының һәм быуаттар элек был ерҙәргә күсеп ултырған башҡа милләт вәкилдәренең тарихы, традицияһы тураһында мәғлүмәт алыу, ихтирамлы мөнәсәбәт нигеҙендә интернациональ, толерантлыҡ тойғоһо тәрбиәләү маҡсатында һәр балала иң элек үҙ |

| | |
|---|---|
| | туған теленә, халкына карата һөйөү тәрбиәләү |
| Программаның төрө | Программа 21, 14, 7 көнлөк сменалар өсөн тәғәйенләнгән өлөштәрҙән һәм кушылмтанан тора. |

## Аңлатмалы яҙыу һәм программаның актуаллеге

“Йәйләү”ҙең төп маҡсаты – балаларҙы физик һәм рухи яҡтан сыныҡтырыу, уҡыусының һәр яҡлап һәләтен асыу өсөн йүнәлеш биреү, артабан үҙ тәрбиә менән шөғөлләнеүгә нигеҙ һалыу, бала булмышында, аңында Тәбиғәттән бирелгән, быуындан-быуынға күсә килгән һәләтен уятыу. Ә бындай тәрбиә биреү, бөйөк фекер эйәләре Ян Коменский, Ю Лесгафт, Ҡәйүм Насыри, И. Пестолоцци, Лев Толстой, Ризаитдин Фәхретдинов, Тажетдин Ялсығол һәм, әлбиттә, Константин Ушинскийҙарың фекеренсә, баланың тәбиғи һәләтен асыуҙа иң беренсе урында туған тел, халыҡ педагогикаһы торорға тейеш.

Бөтөн халыҡтар ҙа үҙ киләсәген үҙ тәжрибәһендә тупланған халыҡ педагогикаһы нигеҙендә тәрбиәләгән. Ушинский фекеренсә, халыҡсанлыҡ принциптары төп урында торорға, тәрбиә эшенең нигеҙен тәшкил итергә тейеш. Халыҡ педагогикаһы – ул ҡағиҙәләр түгел. Халыҡ педагогикаһы һәр халыҡтың тарихы, традициялары, йолалары, мәҙәниәте, сәнғәте, ижады аша алып барылған тәрбиә. Ошо нигеҙҙә ил һөйәрлек тәрбиәләнә. Илһөйәрлек – ул үҙ милләтеңде, үҙең йәшәгән төбәкте генә түгел, ә уларға булған һөйөү аша бөтөн халыҡтарға, бөтөн илдәргә ҡарата ла йылы мөнәсәбәт тыуҙырыу тигән һүҙ. Әммә бөгөнгө мәктәптәрҙә, беҙ был принциптарға таянып эш итә алмайбыҙ, мәктәптәребеҙ күп милләтле, һәм беҙ, донъя халыҡтары, шулай уҡ һәр халыҡта айырым-айырым тупланған рухи ҡиммәттәрҙе файҙалана алмайбыҙ, йәғни Ушинский билдәләгән төп принципты, туған тел мөхите булдырып, туған тел аша халыҡтың быуаттар буйы тупланған хазинаһын тәрбиә эшендә ҡуллана алмайбыҙ.

Ушинский билдәләүенсә, халыҡ тарихы, уның тәжрибәһе, әхлаҡи һәм эстетик хыялы, уның Ватанға булған һөйөүе, уй-хыялдары һәм киләсәккә өмөтө, әйтәһе фекере туған тел ҡиммәттәрендә һаҡлана һәм фәҡәт туған тел аша бала күңеленә юл ярып була. Шуның өсөн әле кешелек донъяһында китаптар ҙа, мәктәптәр ҙә булмаған замандарҙа уҡ балала рухи ҡиммәттәр тәрбиәләнгән. Әммә, халыҡтың прогрессив традицияларын файҙаланып, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә булһа ла “Йәйләү”

профилле сменаһының программаһы нигеҙендә ошо бушлыҡты тултырырға мөмкинселек бар.

Һәр хәлдә халыҡ традицияларының иң һәйбәт өлгөләре нигеҙендә бала күңеленә тәбиғәттән һалынған рухи ҡиммәттәрҙе уятып ебәреү өсөн йүнәлеш биреп була. Был программа нигеҙендә рухи байлыҡҡа ҡарата һөйөү уятыла, артабан тормошта ошо йүнәлештә үҙтәрбиә менән шөғөлләнерлек йүнәлеш бирелә. Был – заман талабы, сөнки донъяла барған кире күренештәр бала күңеленә юл яра, аңын томалай.

Үҫмер телевидение, интернет аша үҙ белдеге менән төрлө тапшырыуҙар ҡарап, ҡанына һалынған рухи ҡиммәттәргә юл ябып, бөтөнләй ят мөхит тәрбиәһе солғанышында ҡалыуы, үҙен юғалтыуы ихтимал. Көнбайыш һәм Америка тәьҫирен һаман нығыраҡ тоябыҙ.

Шундай шарттарҙа бала күңелен кире йоғонтонан ҡурсалап алып ҡалыуҙың иң ышаныслы юлдарының береһе – Константин Ушинский тәғлимәте икәнлегенә программаның ике тиҫтәгә яҡын уңышлы эшләп килеүе аша инанғанбыҙ: ысынлап та, туған телде өйрәнеү, байытыу, халҡыбыҙ фәлсәфәһен аңларлыҡ кимәлгә еткереү, бала күңелендә иң элек туған халҡына, уның теленә, ижадына, тарихына һөйөү орлоғо сәсеүҙән башлана. Был маҡсатты иһә беҙ аҙ ғына ваҡыт эсендә (өс аҙна) төрлө юлдар, төрлө ысулдар, төрлө алымдар менән тейешле мөхит солғанышында тормошҡа ашырабыҙ. Был олоғара эште башҡарып сығыу өсөн бик әҙерлекле тәрбиәселәр, әйҙәүселәр, хеҙмәткәрҙәр, музыка белгестәре, хатта аш-һыу атамаһын башҡортса әйтеп тороусы ашнаҡсылар кәрәк. Әлбиттә, бик ҡыҫҡа осорҙа бала күңелендә ҡырҡа боролош яһау күҙҙә тотолмай, ул маҡсат ҡуйылмай ҙа. Ә аңына ыңғай яҡтан тәьҫир итеү, сәләмәт тормош алып барыуҙың мөһимлеген аңлатыу, коллективта үҙеңде тотоу, һыйышып тыныс йәшәү принциптарына, сәмле ярыш, бәхәс алымдарына өйрәтеү һәр үткәрелгән сарала төп маҡсаттарҙың береһе итеп ҡуйыла.

Ырыуҙарға бүленеү шартлы рәүештә булһа ла, балалар, тәғәйен ырыуҙарҙан тупланып, ырыу тарихын, шәхестәрен, боронғо шөғөлөн өйрәнеп, дөйөм халыҡтың рухи һәм матди ҡиммәттәрен өйрәнәсәк.

Ял итеүселәрҙең йәше 7-15 араһы. "Йәйләү" отрядтарға түгел, ырыуҙарға бүленеп эшләй. Ырыуҙар төрлө йәштәге балаларҙан туплана.

Программаны эшләгәндә, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының белем биреү, балалар хоҡуғын яҡлау, хеҙмәт кодексы, хеҙмәт һәм ял итеүгә ҡағылған бөтә Законда ҙ һәм норматив-хоҡуҡи документтар иҫәпкә алынды.

Балаларҙың ял итеү сменаһына уҡытыусылар, тәрбиәселәр һәм әйҙәүселәр һайлап алына, әммә төрлө коллективтарҙан тупланған ваҡытлыса педагогик коллективты программа менән таныштырыу һәм йүнәлеш биреү мотлаҡ.

## “Йәйләү”ҙең маҡсаты һәм бурыстары

Төп маҡсат – туған телдә телмәр байлығын үҫтереү, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тарихын, йолаларын, балалар уйындарын, ижадын, спорт төрҙәрен өйрәнеү, музыка ҡоралдарында уйнап өйрәнеү, боронғо шифалы ризыҡтарҙы әҙерләү серҙәренә төшөнөү, ырыу легендаларын өйрәнеү, халҡыбыҙ шәхестәре, сәнғәт өһелдәре менән танышыу.

**Бурыстар:**

баланың ҡанына һалынған һәләтен асыу;

балала туған төбәккә, тәбиғәткә, илгә ҡарата һөйөү уятыу, тәбиғәтте һаҡлау зарурлығын аңлатыу;

музыка ҡоралдарында уйнауҙы рухи сәләмәтлеккә лә, физик сәләмәтлеккә лә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу аша уйнарға өйрәтеү;

бейей һәм йырлай белеүҙең сәхнә өсөн генә түгел, көндәлек тормошта сәләмәт йәшәү шарттарының нигеҙе икәнлеген, рухи сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу һәм бейергә өйрәтеү (“Бейемәгән башҡорт юк !”– тигән девиз менән эшләү) ;

саф һауала, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир яһарлыҡ шарттарҙа баланың физик һәм рухи ҡиммәттәрен үҫтереүгә, үҙ тәрбиә менән шөғөлләнергә йүнәлеш биреү;

баланы үҙе өсөн генә түгел, коллектив (“Йәйләү”ҙә ырыу) өсөн дә, артабан мәктәп, уҡыған һәм эшләгән коллективы өсөн дә йәшәргә, борсолорға, уның мәнфәғәтен күҙәтергә өйрәтеү;

буш ваҡытты дөрөҫ файҙаланырға, ялды ойоштора белергә, беренсел мөһим бурысты үтә мөһим булмағандарынан айырып өйрәтеү;

бер генә минутты ла бушҡа үткәрмәй, файҙалы маҡсаттарға йүнәлтеп өйрәнеү күнекмәһе булдырыу, баланы үҙ-ара мөғәмәлә итеү, бәхәсләшеү, тапҡыр һәм дөрөҫ яуап биреү күнекмәһе тәрбиәләү;

баланың күңел донъяһына ыңғай тәьҫир итеү; башҡаларҙы аңлау өсөн, үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарарға өйрәтеү,

халҡыбыҙ булмышын, йәшәйешен өйрәнеү;

баланың ни менән ҡыҙыҡһыныуын күҙәтеү, өйрәнеү һәм йүнәлеше биреү;

шифалы үҫемлектәрҙе танырға, йыйырға, һаҡларға, ҡулланырға өйрәтеү;

үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең, хайуандарҙың, башҡортса атамаларын өйрәтеү, атамалар менән бәйле һынамыштар, әйтемдәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар өйрәнеү;

көн, аҙна, ай, мөсәл, йыл атамаларын башҡортса өйрәнеү;

йылҡы малы, һыйыр малы һәм башҡа йорт хайуандары менән бәйле көнкүреш әйберҙәре атамаларын белеү.

**Эш йүнәлештәре:**

лекциялар;

мәғәнәле, маҡсатлы, сюжетлы уйындар;

белгестәр, күренекле әһелдәр, төрлө музыкаль төркөмдәр менән осрашыуҙар, лекциялар, әңгәмәләр;

иҫтәлекле урындарға сәйәхәттәр;

һыбай йөрөү күнекмәләренә өйрәнеү;

һыу инеү, йөҙөп өйрәнеү;

сәйәхәт ваҡытында усаҡ яғыу, һүндереп китеү хәүефһеҙлеген өйрәнеү;

сәсәнлек мәктәбе, ҡул эштәре, боронғо шөғөл төрҙәрен өйрәнеү түңәрәктәре ойоштороу;

әңгәмәлә ҡатнашыу, һорау биреү, бәхәс ҡороу нескәлектәрен үҙләштереү;

ҡурай үләне, уҡ-йәйә өсөн ҡулайлы ағас табып өйрәнеү һ.б.

**Өлгәшеләсәк һөҙөмтәләр**

Ял итеү үҙәгенең маҡсаттарынан һәм бурыстарынан сығып, тәрбиәселәр һәм әйҙәүселәргә юғары кимәлдә башҡорт телендә һөйләшеү; тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, ижадын яҡшы белеү; йыр-бейеүгә маһир булыу, берәй музыка ҡоралында уйнай белеү кеүек талаптар ҡуйыла. Рухи сәләмәтлек тәрбиәләү өсөн үҙ халҡыңдың быуаттарҙан-быуаттарға һынала, камиллаша, күсә килгән рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү тормошҡа ашырыла.

Республикабыҙға исем биргән башҡорт халҡының һәм быуаттар элек был ерҙәргә күсеп ултырған башҡа милләт вәкилдәренең тарихы, традицияһы тураһында мәғлүмәт алыу, ихтирамлы мөнәсәбәт нигеҙендә илһөйәрлек, интернациональ, толерантлыҡ тойғоһо тәрбиәләү маҡсатында һәр балала иң элек үҙ туған теленә, халҡына ҡарата һөйөү тәрбиәләнә.

## Программаның йөкмәткеһе

### Көн тәртибе

“Йәйләү” профилле сменаның көн тәртибе тәғәйен урынлашкан төбәктең тәбиғәт торошона, сменаның ниндәй миҙгелгә тап килеүенә карап үҙгәреүе ихтимал.

Шуның өсөн көн тәртибенең 30 минутка иртәрәккә йәки һуңыраҡҡа, алға–артҡа шылыуы мөмкин.

1. Йәйләүгә килеү.
2. Күнекмәләр.
3. Иртәнге аш.
4. Конкурстарға әҙерләнеү. “Алпамыша” ярыштары.
5. Ял өсөн ваҡыт (Үҙең теләгән эш менән шөғөлләнеү)
6. Төшкө аш.
7. Түңәрәктәрҙә шөғөлләнеү, уйындар уйнау.
8. Конкурстар.
9. Көндәлек эшкә йомғаҡ яһау.
10. Балалрҙы оҙатыу.

### “Йәйләү”ҙең саралар теҙмәһе

“Йәйләү”гә килеү. Ырыуҙарға бүлеү. Ҡор башы һайлау.

“Йәйләү”ҙе асыуға әҙерләнеү: атрибуттар ятлау, ырыу йыры, девиз өйрәнеү, тамға төшөрөү, бүлмәләргә исемлек яҙыу.

“Йәйләү”ҙә үткәрелергә тейешле саралар теҙмәһен яҙып элеү.

Йәш рассәмдәр ярышы. Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге конкурс.

Спорт ярыштары. Алпамыша конкурсы.

Сәсәндәр ярышы. Ерәнсә сәсән, Бәндәбикә, Мөхәмәтша Буранғолов һәм тағы бер нисә сәсән тураһында мәғлүмәт.

Ырыуҙар сығышына әҙерлек башлау.

Йырсылар ярышы. Башҡорттоң атаҡлы йырсылары менән таныштырыу. Береһенең исеменә конкурс.

Бейеүселәр ярышы. Башҡорттоң атаҡлы бейеүселәре менән таныштырыу. Береһенең исеменә конкурс.

Сәхнә оҫталары ярышы.

Юғалған мәкәлдәр.

Юғалған йыр юлдары.

***“Йәйләү”ҙә эш көндәрендәге сараларҙы көнләп бүлеү. Ентекле аңлатыу.***

***1-се көн.***

*Ял итергә килеүсе балаларҙы ҡабул итеү. Ырыуҙарға бүлеү. Балаларҙы оҙаҡ тоткаҫ өсөн, йәшенә ҡарап алдан уҡ бүленә. “Йәйләү” урынлашҡан төп лагерь биләмәһе ниндәй ырыу еренә ҡарай – иң өлкән төркөмгә шул ырыу атамаһы бирелә һәм иң өлкән балалар туплана. Был ырыу Хужа ырыу һанала һәм төп эштәрҙе башҡарыуҙа тәрбиәселәргә, әйҙәүселәргә ярҙам итә йәғни бөтөн сараларҙы ла иң элек улар башлап күрһәтә, башҡалар өлгө ала. Шуның өсөн был ырыуға тәжрибәле тәрбиәсе һәм өйҙәүсе тәғәйенләнә.*

*Артабан балаларҙың йәшенә ҡарап башҡа ырыуҙарға бүленәләр. Ырыуҙар, лагерь мөмкинлегенән, нисә тәрбиәсе һәм әйҙәүсе булыуынан сығып, ике-өс-дүрткә бүленә. Табын, тамъян, мең, ҡыпсаҡ, үҫәргән, ҡатай, юрматы, әйле һәм башҡа ырыуҙарҙың исеме һайлап алып ҡушыла.*

*Ырыуҙар үҙҙәренә тәғәйен бүлмәләргә урынлаша. Әйҙәүселәр уларҙы лагерҙағы бүлмәләр, майҙан, ашхана, ял итеү урыны һәм ял тәртибе менән таныштырып сыға.*

***“Йәйләү”ҙең үҙенсәлеге:***

*а) аралашыу мотлаҡ башҡорт телендә;*

*б) һәр бала бөтөн сараларҙа ла мотлаҡ ҡатнашырға тейеш;*

*в) сараларҙа ҡатнашҡан өсөн бер мәрәй бирелә, сараларҙа ҡатнашып, ниндәйҙер баһаларға өлгәшһә, мәрәйҙәр өҫтәлә бара.*

*г) һәр бүлмә аҡ ҡағыҙ битенә балаларҙың исемлеген яҙып ишеккә элә. Исем-фамилия мотлаҡ башҡортса яҙыла;*

*д) әйҙәүсе һәр балаға “Йәйләү” гимны тип ҡабул ителгән “Башҡортостан” йыры (Дамир Әҙелбаев һүҙҙәре һәм көйө) һүҙҙәрен таратып бирә.*

*е) ҙур ватман ҡағыҙға ырыу атрибуттары һәм күмәкләшеп һайлап алынған ырыу йыры, ырыу девизы яҙып элене. Ырыу башы һайлана. Мөмкинлеккә ҡарап, кис, ашауҙан һуң, ырыу атрибуттарын һәм йырын, шулай уҡ гимнды өйрәнә башлайҙар. (**Гимн һүҙҙәре ҡушымтала**).*

*Балалар көнөнә арналған “Балалар һабантуй”ы үткәрелә.*

***2-се көн.***

*Балалар иртәнге күнекмәләрҙе башҡортса бейеү көйөнә бейеп тамамлап ҡуя.*

*Был көнө сменаны асыуға әҙерлек бара.*

Хужа ырыуҙа әҙерлек. Ырыу башы етәкселегендә атрибут әйтеп өйрәнә, девиз, йыр һәм гимн кабатлай, каршы алыу һүҙҙәре ятлай. Башка ырыу балалары ла атрибуттар, йыр һәм гимн ятлай.

Бейеү һалыусы Хужа ырыуға күмәк бейеү өйрәтә. Ул өс төрлө хәрәкәттән генә торорға тейеш. Бейеүҙе хужа ырыу башлай, шунан дүрт төркөмгә бүленеп (ырыуҙар һаны һәм кунактар төркөмө), ырыуҙарҙы һәм кунактар төркөмөн үҙҙәре өйрәнгән хәрәкәттәр менән бейетә.

**3-сө көн.**

"Йәйләү"ҙе асыу.

Асыу тантанаһы үткәреләсәк урынға тирмә корола, ә майҙан тирмә рәүешендәрәк түңәрәк була. Ырыуҙар линейкаға теҙелеп тормай, майҙандың тирә-яғынан урын ала, Йәйләү асылғандан һуң ултыралар. Ә кунактар өсөн махсус урын әҙерләнә. Ултырыу өсөн лагерь етәкселеге менән килешеп түшәр әйбер алырға кәрәк. Ҙур сәхнә түре башкортсалап биҙәлә. Сәхнә тирәләй ырыуҙарҙың гәзиттәре эленә.

Хужа ырыу балалары араһынан ике алып барыусы, Ырыу башы һәм килгән кунактарҙы, ырыуҙарҙы каршылау өсөн яуаплылар билдәләнә. Улар араһынан каршылаған сакта һүҙ әйтеүсе, Кымыҙ менән һыйлаусылар билдәләнә.

**4- се көн.**

"Алпамыша" спорт ярыштары (уйындар кушымтала бирелә).

Рәссам Касим Дәүләткилдеев призына ярыштар.

Осрашыу. Әңгәмә.

Тәрбиәсе ярҙамында балалар мәкәлдәр яҙып элә. Матур итеп биҙәп, бар оҫталыктарын һалып эшләйҙәр. Әүҙемлеккә карап 1 йәки 2 мәрәй бирелә. Һәр ырыу балалар һанына карап ике кешегә берәр мәкәл яҙып элә һәм "Юғалған мәкәлдәр" уйынына тиклем шуларҙы ятларға тейештәр (уйын тәртибе һәм мәкәлдәр кушымтала бирелә).

**5-се көн.**

"Йәйләү"ҙе ябыу.

"Урал батыр" эпосы буйынса флешмоб.

"Йәйләү" менән хушлашыу.